***Рәис ИСМӘҒИЛЕВ,***
***РФ-ның почетлы кинематографисы***

# Мин яратам һине, кино донъяһы!

Һөнәрем буйынса сәнғәт кешеһе булараҡ, минән интервьюлар алған саҡта, төрлө осрашыуҙарҙа, мәҙәни сараларҙа, хатта таныш-белештәр араһында ла йыш ҡына, «Һеҙ яңынан тормошҡа аяҡ баҫып, һөнәр һайларға тура килһә, кем булыр инегеҙ?» — тигән һорау бирәләр. Мин һис шикһеҙ, бер ҙә икеләнмәйсә: «Кинорежиссер булыр инем», — тип яуап бирәм.

Ғәжәйеп серле кино сәнғәте мине кесе йәштән арбаны. Әлбиттә, ул саҡтарҙа хәҙерге заман кинотеатрҙарындағы кеүек камил эшләнгән, төрлө форматтарҙағы фильмдар ҡарауҙы күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел ине. Белорет районының төпкөл ауылдарының береһе, әле электр сымдары ла үтмәгән Зөйәккә фильмдар график буйынса ғына килтерелә. Киномеханик ағай уларҙы район үҙәгенән үҙе барып алып ҡайтып, халыҡҡа күрһәтә торғайны. Кинофильм тураһындағы сираттағы иғланды күреү менән, ашҡынып ҡайтып, өйҙәгеләрҙән һөйөнсө ала инем. Билет хаҡы — 5 тин. Әммә халыҡ өсөн ул заманда ҙур ғына аҡса. Шуғалырмы, ишле ғаиләләр балаларын көн дә киноға йөрөтә алмай. Балалары алдына маҡсат ҡуялар: «5»-легә генә уҡыйһың, ошо эште яҡшы итеп башҡараһың, уны тамамламай тороп, киноға бармайһың, тиҙәр ине.

Әйтергә кәрәк, беҙҙең ғаиләлә балалар барыһы ла бик тырыш, егәрлеләр, атай-әсәй әйткәнде көтөп тормайҙар, һәр кем үҙенә тәғәйен эшен һә тигәнсе башҡарып ҡуя торғайны. Мәктәптә лә һынатманыҡ. Шулай ҙа, беҙҙә лә көн һайын киноға йөрөү хупланмай ине. Ә минең бик ҡарайһы килә яңы фильмдарҙы. Шунан, инәйем янында бөтөрөлә башлайым, нимә ҡушһа ла, йүгереп эшләй һалып ҡуям. Шулай итеп, сираттағы киноға билетлыҡ аҡса һәм рөхсәт алам. Киноға барыу бәхете тейеү менән клубҡа иң беренселәрҙән булып мин сабам.

Фильм башланыу менән бөтә донъямды онотоп, кино сәнғәтенә сумам. Ундағы ваҡиғаларҙы күңелем аша үткәрәм, персонаждар менән бергә ҡайғырам, борсолам, шатланам. Шулай итеп, 2 сәғәт ваҡыт «ялт» итеп үтә лә китә, ә һин һаман уның атмосфераһында йәшәйһең, хәтирәләренә сумаһың. Өйгә ҡайтҡас, һәр кем үҙ фекере менән уртаҡлаша, кемгә ҡайһы персонаж, образ йәки артист оҡшағанын һөйләй. Дошмандарға нәфрәтләнә, ыңғай геройҙарға һоҡлана. Ҡайһы саҡта ҡыҙыу бәхәс тә ҡубып китә ине. Ул

саҡтағы фильмдар йәмғиәт өсөн тәрбиәүи яҡтан бик фәһемле һәм халыҡ өсөн матур өлгө була торғайны. Һәр фильм илһөйәрлек менән һуғарылған, ундағы геройҙар батырҙар, матурҙар, һәр яҡлап көслө кешеләр. Әйтергә кәрәк, киноның илебеҙ халҡына йоғонтоһо үтә лә көслө ине, был сәнғәт төрө совет халҡының әхлаҡи маяғы булды.

М.Шолохов әҫәре буйынса ҡуйылған «Ҡүтәрелгән сиҙәм», ағалы-ҡустылы Васильевтарҙың «Чапаев» фильмдары йөрәгемә, күңелемә шул тиклем ныҡ тәьҫир итте, хатта был фильмдар күрһәтелгән күрше ауылдарға йөрөп, уларҙы бер нисә тапҡыр ҡараным.

Фильмдарҙағы һәр күренеш, ваҡиғаны йөрәгем аша үткәреп, нескә күңелле булғанлыҡтанмылыр, ундағы геройҙар менән бергә ҡыуанам, һыҙланам, әрнейем. Ҡино ҡарағанда залда ҡараңғы бит инде. Эргәмдә ултырған апайҙарға ҡушылып, илап ала инем.

Совет фильмдары көсөргәнешле, төрлө ҡаршылыҡтарға, ваҡиғаларға бай булһа ла, финалдары оптимистик рух менән бөтә торғайны. Ҡино геройҙары күп ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, матур тормош менән йәшәй, шуғалырмы, мин дә үҙемдең ғүмеремде ошо фильмдарҙағы кеүек сағыу, яҡты, бәхетле, матур итеп күҙ алдына килтерә торғайным. Юҡҡа ғына И.В.Сталин 1941 йылда, фашистар Мәскәүгә яҡынлашып килгәндә кинорежиссер Сергей Эйзенштейнды Алма-Ата ҡалаһына «Александр Невский» фильмын төшөрөргә ебәрмәгәндер. Фильмдың аҙағында А.Невский (артист Черкасов башҡарыуында): «Кто к нам в Россию с мечом в руках придет, от этого меча и погибнет!» — тип әйтә. И.Сталин дәһшәтле һуғыш осоронда СССР халҡының тыуған иленә ҡарата патриотизм тойғоларын күтәреүгә өлгәшә.

Минең дә яҙмышым, фильмдарҙағы һымаҡ, 2 сәғәттә «ялт» итеп үтеп китер төҫлө була торғайны. Ул саҡта балалыҡ тәжрибәһеҙлеге менән шулай уйлаһам, хәҙер инде, етенсе тиҫтәне ҡыуып барғанда, үткән ғүмерҙең тап 2 сәғәттәй генә булыуына аңлы рәүештә инандым.

*«Башҡортостан» киностудияһының дүрт директоры (һулдан уңға): Әмир Абдразаҡов, Вил Кәримов, Михаил Новиков һәм Рәис Исмәғилев*



Ҡешенең теләген уның юғары аңы тормошҡа ашыра, тиҙәр. Мин дә Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультеты студенты булып киттем. «Режиссура» тигән ҡатмарлы һәм текә белем тауына 4-се йыл үрләгәндә, ул 1974 йылдың көҙө ине, Башҡортостан телевидениеһының баш режиссеры Әмир Абдразаҡов мине үҙенә режиссер ассистенты итеп эшкә саҡырҙы. Ул саҡта Әмир ағай «Туй», «Ҡилен килә» исемле музыкаль фильмдар теҙмәһен төшөрә башлаған ине. Уның саҡырыуын шул тиклем ҙур ҡыуаныс менән ҡабул иттем.

Тәүге кинотөшөрөүҙәр Дүртөйлө районы Венеция ауылында башланып китте. Элекке кинокамералар бик ауыр, ҡулланыуы уңайһыҙ, ҡатмарлы ҡорамалдар ине. Ҡинотаҫмаларҙың да сифаты маҡтанырлыҡ түгел. Шуға ла ҡайһы бер төшөрөлгән киноматериалдарҙың хатта 50—60%-ы брак менән сыға торғайны. Ҡилеп сыҡмаған күренештәрҙе ҡабаттан төшөрөү күңелде ҡыра, тәҡәтте ҡорота, ваҡытты һәм көстө ала. Инде эштәр һәйбәт кенә бара тиһәң, көтмәгәндә йә камера, йә магнитофон, йә прожекторҙар көйһөҙләнә, ватыла. Ҡиноға төшөргә саҡырылған актерҙарыбыҙ ҙа төрлө сәнғәт учреждениеларында эшләгән артистар. Ҡемдеңдер көндөҙ театрҙа репетиция, ә кисен улар спектаклдә уйнай, ә инде төнөн улар арып-талып фильм төшөрөләсәк урынға килеп етәләр. Ләкин бер кем дә зарланмай, һәр кем хәлде аңлай. Бар коллектив бик татыу рәүештә, ҙур теләк менән эшләй. Ә бит уларҙың барыһы ла билдәле, күренекле, маҡтаулы исемле артистар. Уларҙың эшһөйәрлегенә, талантына ҡарап шул тиклем һоҡлана инем.

...Фильмды монтажлау — үҙе бер сәнғәт оҫталығы. Был хеҙмәт режиссерҙан етди тырышлыҡ, түҙемлек, эҙмә-эҙлелек талап итә һәм уның күп ваҡытын ала.

*Башҡортостандың мәҙәниәт министры Тәлғәт Сәғитов киностудия эшенә һәр саҡ бик иғтибарлы булды*



Ҡинопленкаларҙы монтажлау менән генә эш бөтмәй, яҙылған материалға музыка, төрлө тауыштар, шау-шыуҙар һәм сценарий талап иткән башҡа имитациялар ҙа өҫтәү зарур...

Бындай көсөргәнешле эш тамамланғас, фильмды художество советы ҡарап, ҡабул итергә тейеш. Ә унын составында кино сәнғәтен аңлаған 1—2 кеше булһа, бик яҡшы әле ул. Башлыса, ғүмерендә бер генә метр ҙа кинотаҫма төшөрмәгән партия һәм хөкүмәт вәкилдәре, чиновниктар фильмды әҙерләүсе ижади төркөмдө пыран-заран килтереп тәнҡитләйҙәр, юҡҡа ла сығарып ташлайҙар. Береһенән-береһе аҡыллыраҡ күренергә тырышып, «тегеһен алып ташла, быныһын өҫтә!..» тип бик «аҡыллы» кәңәштәр тәҡдим итәләр.

Ошоларҙы иҫкә алһаң, «Фильм, фильм, фильм...» — тигән мультфильм иҫкә төшә. Тап был мультфильмда режиссерҙың эше бик тә дөрөҫ күрһәтелгән. Йәл, бихисап худсовет ағзалары бындай фильм барлығын хатта белмәгәндәрҙер ҙә.

Үҙаллы төшөрөлгән фильмдарҙың тәүгеһе 1980 йылда булды. Ул «Александр Матросов» тип аталды. Фильмдың төп өлөшө Ульяновск ҡалаһындағы балалар йортондағы тәрбиәселәр, А.Матросовтың класташтары менән осрашыуҙан һәм уларҙан интервью алыуҙан торҙо.

Ул саҡта Башҡортостан телевидениеһының документаль фильмдар төшөрөү хоҡуғы юҡ ине, башлыса Мәскәү заказы буйынса ғына кинофильмдар төшөрөлә килде. Шундай заказдарҙың береһе — данлыҡлы комбайнсы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Риза Яхин тураһында фильм-портрет төшөрөү минең иңгә һалынды.

Сценарий авторы итеп билдәле публицист, ҡәләм оҫтаһы Ғәзим Шафиҡов тәғәйенләнде, ә кинооператор бурысын Фәнис Вәлиевҡа тапшырҙыҡ.

*«Ел аулаусы» фильмын төшөргән осорҙа актер Марат Башаров һәм БР Премьер-министры урынбаҫары Хәләф Ишморатов менән*





*«Игенсе подвигы» документаль фильмы геройы комбайнсы Риза Яхин*

Баймаҡ районы Йылайыр совхозы беҙҙе бик ихлас ҡабул итте. Ҡино төшөрөүҙәр иртәнге яҙҙан — сәсеү башланыу менән, ҡара көҙгә тиклем — урып-һуғыу тамамланғансы дауам итте. Риза ағай Яхиндың ерҙе, игенселекте, техниканы шул тиклем яратып эшләүенә хайран ҡалдым. Төнгө сменала таңға тиклем комбайны менән иген ура, иртәнге аштан һуң звеноһындағы башҡа комбайндарҙы ремонтларға керешә. Йоҡо тигәнең ике-өс сәғәт кенә тәтей торғайны. Ул яҙғы сәсеү, урып-һуғыу мәлендә 25-әр килоға тиклемябыға ине. Һауа торошо яҡшы саҡта игенселәрҙең күпселеге ошо режимда эшләнеләр.

...Ул заманда агитбригадалар бик әүҙем эшләй торғайны. Яланда, игенселәр янында артистар концерт күрһәтәләр, лекторҙар донъяла ниндәй яңылыҡтар барлығын һөйләйҙәр. Риза ағай иһә миңә: «Рәис ҡустым, һин бит Өфөнән килгәнһең, етәкселәр менән аралашаһың, райком кешеләренә еткерсе. Көндәр матур торғанда игенде тиҙерәк урып-һуғып алырға кәрәк. Ә концерттарҙы көҙөн, ҡышын, эштәр тамамланғас ҡарар инек», — тип зарлана ине. Ана шундай иҫ киткес эшһөйәр, тырыш, эшлекле, кешелекле, ысын мәғәнәһендә ялан батыры булды ул Риза ағай.

Фильмды тамамлағас, Мәскәүгә, Үҙәк телевидениеға (ул ваҡытта Шаболовка, 37) алып барҙым. Режиссура өлкәһен, әлбиттә, ныҡ ҡына тәнҡитләнеләр. Ә шулай ҙа мин бик бәхетле инем, сөнки Риза ағай Яхин кеүек шәхес менән яҡындан таныштым һәм ғүмер буйы уның эшлеклелегенә һоҡланып йәшәйем. Ә фильмды, бик күп кенә кәңәштәр биреп, өҫтәп төшөрөргә ҡушып, ҡайтарып ебәрҙеләр. Ошо ваҡиғанан һуң мин театр режиссураһының кино сәнғәтенән айырмалығы бик ҙур икәнен аңланым һәм үҙемдең кино режиссураһындағы белемемде камиллаштырырға тотондом. Шулай итеп, «Игенсе подвигы» документаль фильмын Үҙәк телевидениеға уңышлы ғына тапшырҙым. Уны бер нисә тапҡыр бөтә Советтар Союзына күрһәттеләр. Был минең өсөн, әлбиттә, ҙур уңыш ине.

Егерме йыл телевидениела эшләгән дәүерҙә 30-ҙан ашыу фильм төшөргәнмен. Рәми Ғарипов, Зия Нуриев, Заһир Исмәғилев тураһындағы фильмдар, данлыҡлы «Арҡайым» һәм башҡалар... Ниндәй яҙмыштар, халыҡ тарихы... Халҡыбыҙҙың береһенән береһе уңған, талантлы ул-ҡыҙҙарының гөрләтеп эшләп йәшәгән саҡтарын таҫмаға төшөрөп, йәш быуынға еткереү, тарихта ҡалдырыу — сауаплы эш, тип иҫәпләйем. Аллаға шөкөр, шуғалыр ҙа үҙемде бик бәхетле итеп тоям.

Әгәр мин бик бай кеше булһам, гел генә фильмдар төшөрөү менән шөғөлләнер, ғүмеремде ошо күркәм сәнғәткә арнар инем. Ә яңынан ер йөҙөндә йәшәргә насип булһа, һис шикһеҙ, кинорежиссер һөнәрен һайлар инем.